**Көҙ байрамы: «Урманда көҙ»**

Акилова Р.М.

**Ҡатнашалар:**
Алып барыусы
Төлкөбикә
Ҡуян
Көҙһылыу
*Күңелле көй аҫтына балалар залға инәләр.*

**Алып барыусы.** Балалар, мин һеҙҙе тылсымлы көҙгө урманға саҡырам. Ләкин юл бик алыҫ, аяҡтарыбыҙ арымаһын өсөн, поездға ултырып барырға кәрәк. Поездға ултырабыҙ!

*Балалар бер-бер артлы теҙеләләр, алда – алып барыусы. Тыпырлап зал буйлап хәрәкәт итәләр.*

Урманға килеп еттек. Аяҡ аҫтында төрлө төҫтәге япрактар ята: кызыл , һары, иң-иң матурҙары. Эйе бит?

Кем беҙҙең урманды шулай матур итеп биҙәгән икән? Эйе, ул – тылсымсы Көҙһылыу. Ул бик тырышҡан, бөтә япраҡтарҙы һарыға буяған.Әйҙәгеҙ беҙ йырлап-бейеп алайыҡ

Йы - бейеү “*Кунелле полька”*

*Көй аҫтына Төлкөбикә килеп инә.*

**Төлкөбикә.**
Мин – матур Төлкөбикә,
Үҙем бигерәк иркә.
Ишеттем йыр – бейеүҙе,
Күңелле уйындарҙы.
Бергә уйнағым килә,
Йыр йырларға, көлөргә.

**Алып барыусы.** Беҙ һиңә бик шатбыҙ, Төлкөбикә. Һинең менән бейеп тә алырбыҙ!

**Төлкөбикә.** Балалар, һеҙ бигерәк бәләкәй генәһегеҙ. Нисек бейей алырһығыҙ икән? Ҡулдарығыҙ нисек бейей? (*көй аҫтына балалар ҡулдары менән хәрәкәт күрһәтәләр.*) Ә аяҡтарығыҙ? (*Хәрәкәттәр күрһәтелә.*) Һеҙ ысын бейеүселәр икән!

***Танец с листочками***

**Алып барыусы.**
Кемдер тағы ла беҙгә,
Юлда һикереп килә.
Ҡолағы оҙон,
Ҡойроғо ҡыҫҡа.
Үҙе бигерәк шаян
Исеме уның …

**Балалар.** Ҡуян.

*Көй яңғырай, залға Ҡуян килеп инә.*

**Ҡуян.**

Танышайыҡ, мин – Ҡуян,

Урман эсендә оям.

Бары тик оямда ғына

Үҙемде батыр тоям.

Бында ниндәй байрам? Бөтәһенә лә күңелле.

**Алып барыусы.** Беҙҙә байрам, Ҡуянҡай. Көҙ байрамы.

**Ҡуян.** Мин дә һеҙҙең менән бейегем, йырлағым килә.

**Төлкөбикә.** куянҡай, ни өсөн һине Шәп аяҡ тип йөрөтәләр.

**Куян.** Шәп йүгергәнгә.

**Төлкөбикә.** Ярай инде, маҡтанма. Һин минән дә шәберәк йүгерәһеңме?

**Ҡуян.** Әлбиттә! Хатта һин миңә йүгереп етә алмайһың.

**Төлкөбикә.** Һин ысынлап та маҡтансыҡ икәнһең!

**Ҡуян.** Тотоп ҡара. Бер! Ике! Өс!

*Күңелле көй яңғырай, балалар сәпәкәй итәләр, Төлкөбикә Ҡуянды баҫтыра.*

**Төлкөбикә.** Ҡуян, һин ысынлап та шәп йүгерәһең икән. Афарин! Балалар, һеҙ ҙә шәп йүгерәһәгеҙме?

**Ҡуян.** Улай булғас, Төлкөбикә менән уйын уйнайыҡ. Уйын ябай түгел, ә тылсымлы! Беҙ һеҙҙең менән ҡуяндарға әйләнәбеҙ! (*балалар залға үтәләр*). Ҡуяндар бигерәк күп икән. Беҙҙең Төлкөбикә үҙенең ояһында йоҡлап ятҡан ваҡытта, ҡуяндар яланға сыҡҡандар!

***<u>“Ҡуяндар һәм төлкө” уйыны</u>***

**Төлкөбикә.** Ай-һай, шәп ҡуяндар! Бер-кемде лә тота алманым.

**Алып барыусы.**

Куян алып килэ Коз хылыузы . Балалар карагыз эле, куян безгэ кемде алып килгэн?

**Балалар:** куян

**Алып барыусы:** Дорос балалар, безгэ куян коз хылыузы кунакка алып килгэн.

рэхим ит коз хылыу!

**Алып барыусы:** Балаллар эйзэгез ҡуянға узе тураһында йыр йырлап ишеттерэйек

***<u>Йыр “Ак куян”</u>***

**Алып барыусы:** афарин балалар! бик матур йыр йырлап,куңел асып алдыҡ!

*Эйзегез балалар коз хылыу менэн уйын уйнап алайык. Бэшмэктэр уйыны*

***<u>Игра с грибочками</u>***

**Алып барыусы:** балалар, хезгэ урманда байрам окшанымы? Эйе бик кунелле, матур байрам булды! Э хэзер паровозга ултырып балалар баксахына кайтайык! Куян менэн толко менэн хушлашайык!

**Балалар:** һаубулығыҙ!

**Толко, куян:** һаубулығыҙ! килэге осрашканга тиклем.

(куннеле кой астында балалар паровоз булып балалар баксахына кайталар)